**22–се практик эш**

**Темаһы:** Ауыл хужалығында транспорт. Транспорт в сельском хозяйстве.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** эйәрсән ваҡыт һөйләмдәрҙе төҙөү һәм ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на образование и применение  придаточных предложений времени.

**Маҡсат:** Башҡортостанда транспорттың иң күп ҡулланылған төрҙәрен асыҡлау, ҡылымдарҙы ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.

2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж**

**1.Һүҙлек эше:**

| | |
|---|---|
| ҡулланыла – используется | файҙаланыла – используется |
| төр, төрҙәр- вид, виды | сәсеү  - посев |
| һөрөү – вспашка | урып – йыйыу – сбор урожая |
| тәгәрмәсле – колесный | йөк, йөк ташыу – груз, грузовой |
| һаналған – считался (ась) | төр – вид төрҙәре – виды |
| етерлек – хватает | эш бармай – работа не спорится |

2. Грамматик материал дәреслектең 216 – сы битендә:

**Эйәрсән ваҡыт һөйләм** – придаточное предложение времени указывают на время того, о чем говорится в главном предложении и отвечают на вопросы: **ҡасан?** (когда?), **ҡасандан бирле?** (с каких пор?), **ҡасанға тиклем?** (до каких пор?). Мәҫәлән: Ҡасан һин алдашмай башлайһың, шул саҡта кешеләр ҙә һиңә ышана башлар. Когда ты перестанешь врать, тогда и люди начнут тебе верить.

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем.** Текст өҫтөндә эш:

1.Тексты рус теленә тәржемә итегеҙ.

2.Текстан эйәрсән ваҡыт һөйләмдәрҙе табығыҙ һәм күсереп алығыҙ:

**Ауыл  хужалығында  транспорт.**

Элекке ваҡытта йөк ташыу һәм башҡа эштәр эшләү өсөн иң күп ҡулланылған транспорт булып ат һаналған.  Ауылда  атһыҙ кеше булмаған. Ат менән йөк ташығандар, ер һөргәндәр, пассажирҙарҙы йөрөткәндәр. Хәҙер ауыл хужалығында төрлө транспорт төрҙәре ҡулланыла. Шуларҙан иң күп ҡулланылғаны: комбайн, тәгәрмәсле трактор, гусеницалы трактор,  йөк машиналары, К-700 һәм башҡалар .

Яҙ еткәс, сәсеү башлана. Сәсеүҙә күберәк трактор, йөк машиналары файҙаланыла. Көҙ еткәс, комбайн һәм йөк машиналарына эш етерлек була. Яҙғы-көҙгө һөрөү эштәре башланғас, күп колхоздарҙа гусеницалы трактор файҙаланыла. Колхоз  һәм совхоздарҙа  транспортһыҙ  эш бармай.

**2-се бирем. Вариантлап эш.** Эйәрсән ваҡыт һөйләмдәрҙе төҙөгөҙ (образуйте придаточные предложения времени с добавлением или главного, или придаточного предложения).
**1-се вариант: 1**.Көҙ еткәс, ... . **2. ...** , транспорт мөһим роль уйнай. **3**.Йәйге каникулдар башланғас, ... .
**2 - се вариант: 1**. ... , мин ауылға ҡайтам. . **2.** Эш бөткәс, ... . **3.** Ҡышҡы каникулдар башланғас, ... .

**3-сө бирем.** Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе төшөп ҡалған хәрефтәрен ҡуйып күсереп яҙығыҙ (Данные слова и словосочетания перепишите, поставив недостающие буквы): ау...л х...жалығы, с…сеү, һ…рөү, урып-й…йыу, к...ҙгө эш, й…к , ау…л эше, колхозс...лар, тәгәрм…с, ял…н, баç…у, ...ҙғы эш, уң…ш, й...йге каникул.

**4-се бирем.**Мәкәлдәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ (Спишите пословицы, найдите русские эквиваленты): 1.Кем эшләмәй – шул ашамай. 2.Йәй ҡышты туйҙыра. 3.Эшең булһа йөҙ, туҡ булырһың көҙ. 4.Хөрмәт һөйһәң - хеҙмәт һөй. Ҡыш көнө – арбаңды, йәй көнө – санаңды әҙерлә. 5.Хеҙмәттең тире әсе, емеше татлы.

**5-се бирем.** Бирелгән һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ (переведите данные слова на русский язык): мал табибы, һөнәр, ауыл хужалығы, сәсеү, ер, иген, игенсе, колхозсы, баçыу, малсы, һауынсы, һалам, бесән, һөрөү, әҙерлек, аҙыҡ –түлек.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент белергә һәм эшләй белергә тейеш:**

1.Башҡортостандағы иң төп транспорт тураһында - транспорттың үçеш юлын билдәләргә, эйәрсән ваҡыт һөйләмдәрҙе төҙөүҙең ысулдарын билдәләргә,
2.Һөйләмдәр төҙөү, эйәрсән, баш һөйләмдәрҙе билдәләү буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Башҡорттарҙың төп транспортын нимә тәшкил иткән?
2.Башҡорттарҙың транспорт ҡулланыуы нимәгә бәйләнгән?
3.Эйәрсән ваҡыт һөйләм нисек барлыҡҡа килә, ниндәй һорауҙарға яуап бирә? Миçалдар килтерегеҙ.

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 216-217-се биттәр, Л.2.229-230 – сы биттәр. Текст тәржемә итергә.

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.